

**<u>Рәшит Ниғмәти,</u>**
**Ниғмәтуллин Рәшит Ниғмәтулла улы** -
башҡорт совет яҙыусыһы, шағир, драматург,
балалар яҙыусыһы, тәржемәсе.
Башҡортостандың халыҡ шағиры.

# Тормош юлы

- 1909 йылдың 9 февралендә хәзерге Куйбышев өлкәһе Больше-Черниговский районы Диңгеҙбай ауылында донъяға килә.
- Уға туғыҙ йәш тигәндәәсәһе, икенсе йылда атаһы үлеп, үкһеҙ етем ҡалған.
- Рәшит йәштән үк балалар йортонда тәрбиәләнә.
- Ул 1923 йылда тыуған ауылына әйләнеп ҡайта.
- 1924 йылда Өфөгә килеп, В. И. Ленин исемендәге етем балалар мәктәбенә уҡырға инә.
- Ул ошо мәктәптең бишенсе класын тамамлағас, Мәскәүҙә рабфакта уҡый.
- 1933—1936 йылдарҙа ул Алыҫ Көнсығышта Ҡыҙыл Армия сафында хеҙмәт итә
- 1931 йылда Өфө рабфагын тамамлағас, Р. Ниғмәти Туймазы районы гәзитендә эшләй.
- 1934 — 1936 йылдарҙа Ҡыҙыл Армия сафында хеҙмәт итә.
- Бөйөк Ватан һуғышы алдынан Өфөгә күсеп, республика гәзиттәрендә, Башҡортостан Яҙыусылар союзында эшләй.
- 1944 йылдан КПСС ағзаһы ине.
- 1938 йылдан алып СССР Яҙыусылар союзы ағзаһы булды.
- 1959 йылдың 13 октябрендә  Өфөлә үлә.

# ИЖАДЫ

***1. Һуғышка тиклем:***

- Рәшит Ниғмәтизең яҙа башлауы Ленин исемендәге мәктәптә укыған йылдарға тура килә.
- Ул башта үҙенең шиғырҙарын мәктәптәге ҡульяҙма журналдарҙа баҫтыра, әҙәбиәт түңәрәгендә әүҙем ҡатнаша.
- Рәшит Ниғмәтизең беренсе шиғырҙары 1926 йылда «Башҡортостан», «Башҡортостан йәштәре» газеталарында һәм «Яңылыҡ», «Сәсән» журналдарында баҫыла.
- "Кереш" исемле тәүге шиғырҙар китабы 1933 йнылда баҫылып сыға.
- "Дауылдар тыуҙырған ғүмер" тигән поэмаһы.
- "Мин постамын" шиғыры ижады нәк сәскә атҡан 1938 йылда яҙыла.
- «Украина» тигән автобиографик шиғыры.
- «Йәмле Ағиҙел буйҙары» тигән лиро-эпик поэмаһы (1939 йыл).

***2. Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында:***

- "Үлтер, улым, фашисты!",
- "Һинең кәләшеңдең хаттары" кеүек поэмалары.

***3. Һуғыштан һуң:***

- «Большевик»
- «Һаҡмар ҡыҙы»
- "Осҡондан ялҡын…" тигән поэмалары.
- «Тыуған илем өсөн» шиғыры.
- «Әсә һүҙе» шиғыры.
- «Үс ал, патриот!» шиғыры.
- «Баҫыуға, туғандар!» шиғыры.

# Ижадының тематикаһы

1. ***Һуғышка тиклем ижады:***

- Совет иленең йәшлеге, совет йәштәре, комсомол тураһында.
- Аслыҡ йылдарҙа етем балаларҙы үҙ ҡосағына алған Украинаны тураһында.
- Башҡорт халҡының үткән героик тарихы, бөгөнгө бәхетле тормошо тураһында.
- Иҙеүселәргә баш эймәгән һәм үҙ хоҡуғын Октябрь көндәрендә яулап алгап халыҡ, унын батырлығы тураһында.
- Башҡорт халҡының туған ер хаҡындағы традицион Ағиҙел һәм Уралтау образдары арҡылы совет патриотизмы, халыҡтар дуҫлығы тураһында.

2. ***Бөйөк Ватан һуғышы осоро ижады.***
3. ***Һуғыштан һуңғы осор ижады.***

# Баҫыуға, туғандар!

Яҡшы бел: илдең һәм
тормоштоң ныҡлығы —
Колхозда, совхозда
башаҡтар туҡлығы!
Һәр бөртөк — ул пуля,
граната һәм ҡылыс,
Һәр бөртөк Гитлергә
бомбалай ҡурҡыныс!
Әйҙәгеҙ баҫыуға
күмәкләп, эркелеп.
Юғалып ҡалмаһын
ашлыҡтың бөртөгө!
Әйҙәгеҙ, йәштәр һәм
йәштәре уҙғандар,
Баҫыуға, баҫыуға
баҫыуға, туғандар!
1941, август

# Салауат иптәш

Был иптәшкә ике йөҙ йәш инде,
Ә ул әле һаман үлмәгән.
Исемен дә уның, эштәрен дә
Заман да, тупраҡ та күммәгән.
Ике йөҙ йыл буйы
халҡы менән
Бергә атлап килә был батыр.
Ҡырҡ өсөнсө йылда
ул, танк булып,
Фашист армияһын ҡыйратты.
Ошо иптәште беҙ
танк итеп тә,
Йыр итеп тә бик ныҡ яраттыҡ.
Ҡырҡ өсөнсө йылда
ул, йыр булып,
Яуға өндәне беҙҙең һалдатты.
Иҙел аша ҡарап, һәйкәл тора.
Һағынам уны,
оҙаҡ күрмәһәм.
Ә күрҙемме, уға:
— Һаумы, иптәш,
Һаумы, замандаш! — тип өндәшәм.

1952 йыл

# Сәскәләр шиңер иртәгә...

Сәскәләр шиңер иртәгә,
Шиңмәһә әгәр бөгөн.
Ал һин минең һөйөүемде,
Һөйөү ул сәскә түгел.

1955 йыл

# Наградалары

- Башҡорт совет әҙәбиәтен үҫтереүҙә күрһәткән ҙур ижади хеҙмәттәре өсөн Рәшит Ниғмәти:

1. Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ,
2. Ике тапҡыр "Почет Билдәһе" ордендары менәм бүләкләнә.
3. 1959 йылда уға "Башҡортостандың халыҡ шағиры" тигән маҡтаулы исем бирелә.

